13 СЕНТЯБРЬ – БЕРҘӘМ ТАУЫШ БИРЕҮ КӨНӨ

Республика һайлауға әҙер

Пандемия көндәлек тормошобоҙға ғына түгел, һайлауҙа тауыш биреү барышына ла төҙәтмәләр индерҙе

Быйылғы һайлауҙар, сәйәси сараның үҙенсәлектәре, пандемия шарттарында тауыш биреү мөмкинлектәре тураһында Башҡортостан Республикаһы Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Илона МАКАРЕНКО яуап бирә.

– Берҙәм тауыш биреү көнөнә тиклем бик аҙ ваҡыт ҡалды. Быйыл ул 13 сентябргә тура килә. Республикабыҙҙа был көндә ниндәй кимәлдәге һайлау уҙғарыла?

– Быйыл беҙҙең республикаға муниципаль һайлау кампанияларының күпләп үткәрелеүе хас. Атап әйткәндә, Өфө һәм Межгорьенан тыш, барлыҡ ҡала округтарында, муниципаль райондарҙа, ҡала һәм ауыл биләмәләрендә урындағы үҙидараның вәкиллекле органдары депутаттарын һайлайҙар. Урындағы һайлауҙа 1 760 мандат биләнәсәк, шуларҙың яртыһынан күберәге (903 мандат) муниципаль район Советтары депутаттарын һайлауға тура килә. Бынан тыш, Өфөнөң Совет районы хәлҡы – 14-се Новиковка округы буйынса, ә Белорет районы һәм Межгорье ҡалаһы һайлаусылары 35-се Металлургия округы буйынса Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутатын өҫтәмә һайлауҙа ҡатнаша. Дөйөм алғанда, республикала 206 һайлау кампанияһы үтә.

– Мәғлүм булыуынса, бөтә кимәлдәге депутатлыҡҡа кандидаттарҙы тәҡдим итеү һәм теркәү тамамланды. Йомғаҡтары ниндәй?

– Бөтә кимәлдәге һайлауҙа 4 799 кеше үҙ кандидатураһын күрһәтте, 27 августҡа ҡарата шуларҙың 4416-һы теркәлгән. Кандидаттарҙың яҡынса 20 проценты һайлауҙа үҙ-үҙен тәҡдим итеүсе булараҡ ҡатнаша, ҡалғандары 10 сәйәси партияны сағылдыра: “Берҙәм Рәсәй”ҙе – 1777 кандидат, КПРФ-ты – 456, “Рәсәй патриоттары”н – 422, ЛДПР-ҙы – 390, “Ғәҙел Рәсәй”ҙе – 258, “Рәсәйҙең “Йәшелдәр” экологик партияһы”н – 81, “Үҫеш партияһы”н – 40, “Гражданлыҡ платформаһы”н – 31, “Пенсионерҙарҙың ғәҙеллек өсөн партияһы”н – 32, “Яблоко”ны – 24.

– Тауыш биреү 13 сентябрҙә үткәрелә. Һайлаусылар үҙҙәренең ихтыярын тик ошо көндә генә белдерә аламы?

– Ҡануниәттә тауыш биреү өсөн бер нисә мөмкинлек билдәләнә. Мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһының һайлау тураһындағы кодексында тауыш биреү бинаһында урындағы үҙидараның вәкиллекле органдарына һайлауҙа ваҡытынан алда тауыш биреү тураһындағы норма ҡаралған.

Әммә пандемия көндәлек тормошобоҙға ғына түгел, һайлауҙа тауыш биреү барышына ла төҙәтмәләр индерҙе. Шуға күрә Рәсәйҙең Үҙәк һайлау комиссияһы, федераль ҡануниәткә ярашлы, тауыш биреүҙең өҫтәмә алымдарын тәҡдим итте: тауыш биреү бинаһынан ситтә (өйҙә) ваҡытынан алда тауыш биреү, йорт яны биләмәләрендә ваҡытынан алда тауыш биреү һәм тауыш биреү биналары булмаған һәм транспорт үтеп инеүе ҡатмарлы биләмәләрҙәге һайлаусылар төркөмдәренең ваҡытынан алда тауыш биреүе.

– Ваҡытынан алда тауыш биреүҙең был алымдары араһында ниндәй айырма бар?

– Башҡортостан Республикаһының һайлау тураһындағы кодексында ҡаралған ваҡытынан алда тауыш биреү һайлаусының ғаризаһы буйынса участка һайлау комиссияһының тауыш биреү бинаһында уҙғарыла. Ғаризала һайлаусы ваҡытынан алда тауыш биреүенең сәбәбен (отпускыға, командировкаға, уҡыуға, һаулығына бәйле һ.б.) күрһәтергә тейеш. Ошо рәүешле тауыш биргәндә, тултырылған бюллетень үтә күренмәй торған конвертҡа һалына һәм тауыш биреү көнөнә тиклем тейешле комиссия секретарында һаҡлана. Һайлау тураһындағы кодекс буйынса ваҡытынан алда тауыш биреү эш көндәрендә кисен һәм ял көндәрендә кәмендә дүрт сәғәт дауамында үткәрелә. Уның тауыш биреү көнөнә тиклем ун көн алдан, быйыл 2 сентябрҙән башлана ала.

Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһының 2020 йылдың 24 июлендәге ҡарары буйынса ваҡытынан алда тауыш биреүҙең һайлау комиссияһы бинаһында, шулай уҡ унан ситтә лә уҙғарылыуы мөмкин, йәғни тауыш биреүҙең төрлө алымдары рөхсәт ителә. Шул уҡ ваҡытта өйҙә тауыш биреү осрағынан тыш, һайлаусынан ваҡытынан алда тауыш биреү тураһында ғариза талап ителмәй. Тауыш биреү алымына ҡарап, стационар һәм күсмә йәшниктәр ҡулланыла, ә тултырылған бюллетендәр сейф-пакеттарҙа һаҡлана. Һайлау тураһындағы кодекста ҡаралған алымдан айырмалы, Рәсәйҙең Үҙәк һайлау комиссияһы ҡарарына ярашлы ваҡытынан алда тауыш биреү берҙәм тауыш биреү көнөнә тиклем ике көн дауамында, урындағы ваҡыт буйынса иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 8-гә тиклем тауыш биреүҙе күҙ уңында тота. Әлеге шарттарҙа 11 һәм 12 сентябрҙә ошо рәүешле ваҡытынан алда тауыш бирергә була.

Ҡайһы бер башҡа мөһим мәлдәр ҙә бар. Мәҫәлән, территориаль һайлау комиссияһы Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы ҡарары менән ҡаралған тауыш биреүҙе ойоштороуҙың өҫтәмә алымдарын ҡулланыу тураһында ҡарар ҡабул итһә, урындағы һайлауҙа ул ошондай хоҡуҡҡа эйә, 2020 йылдың 13 сентябренә тиклем ике көн дауамында (алда әйтелгәнсә, 11 һәм 12 сентябрҙә) ваҡытынан алда тауыш биреү Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы ҡарары талаптарына ярашлы ойошторола, ә уға тиклем туғыҙ көн дауамында – һайлау тураһындағы кодекс нормалары буйынса (2 – 10 сентябрҙә).

– Һайлауҙа тауыш биреүҙең теге йәки был өҫтәмә алымдарын ҡулланыу йәһәтенән һайлау комиссияларының ҡарарҙары бармы?

– Һайлауҙы ойошторған 63 территориаль һайлау комиссияһының 30-ға яҡыны ошондай ҡарар ҡабул итеүе билдәле. Республика Үҙәк һайлау комиссияһы ла Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаттарын өҫтәмә һайлауҙа 11 һәм 12 сентябрҙә ваҡытынан алда (тауыш биреү бинаһында һәм унан ситтә) тауыш биреү алымын ҡулланырға ҡарар итте.

– Ҡайһы бер эксперттар билдәләүенсә, тауыш биреүҙең бер нисә алымын (айырыуса ваҡытынан алда тауыш биреүҙе) ҡулланыу һайлау барышына йәмғәт күҙәтеүен ҡатмарлаштыра...

– Беҙҙең комиссиялар асыҡтан-асыҡ эш итә. Тауыш биреү көндәрендә, шул иҫәптән ваҡытынан алда тауыш биргәндә лә кандидаттарҙан, һайлау берекмәһенән, Йәмғәт палатаһынан күҙәтеүселәр һайлау барышына контроллек итә ала. Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһында йәки республика Үҙәк һайлау комиссияһында аккредитация үткән журналистар ҙа тауыш биреүҙе ҡатнашып, үҙҙәренең киң мәғлүмәт саралары-нда һайлау барышын һәм йомғаҡтарын объектив яҡтырта ала.

– Уҙған һайлауҙа һайлаусылар “Мобиль һайлаусы” системаһын киң файҙаланғайны. Быйыл нисек булыр?

– Быйыл Башҡортостан Республикаһында “Мобиль һайлаусы” системаһын Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаттарын өҫтәмә һайлауҙа, йәғни Новиковка һәм Металлургия бер мандатлы һайлау округтарында ғына файҙаланырға мөмкин буласаҡ.

Тауыш биреү көнөндә йәшәгән еренән ситтә, әммә “үҙенең” һайлау округы сигендә булған һайлаусы уны юлланған ер буйынса һайлаусылар исемлегенә индереү тураһында ғариза бирә ала. Ғаризалар 29 июлдә үк ҡабул ителә башланы һәм 8 сентябрҙә тамамлана.

Территориаль комиссияларҙың, шулай уҡ барған ерҙә тауыш биреү тураһындағы ғаризалар ҡабул ителгән күп йүнәлешле үҙәктәрҙең адрестары республика Үҙәк һайлау комиссияһы сайтында һәм социаль селтәрҙәрҙәге уның сәхифәләрендә баҫылған. Ғаризаны “Берҙәм дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр (функциялар) порталы” федераль дәүләт мәғлүмәт системаһы аша ла тапшырырға мөмкин. 2 – 8 сентябрҙә үрҙә телгә алынған һайлау округтарындағы теләһә ҡайһы участка һайлау комиссияһына ла ғариза менән мөрәжәғәт итергә мөмкин.

– Дистанцияла электрон тауыш биреү көтәләме, республикала үтәсәк ниндәй һайлауҙа Мәскәүҙәге һанлы участкаларҙа тауыш бирергә мөмкин?

– Республика биләмәһендә дистанцияла электрон тауыш биреү ойоштороу-ролмай. Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы ҡарарына ярашлы, быйыл ике төбәктә – Курск һәм Ярославль өлкәләрендә уҙғарылған Дәүләт Думаһы депутаттарын өҫтәмә һайлауҙа ғына электрон тауыш биреү үткәрелә.

Мәскәүҙәге һанлы участкаларҙа тауыш биреүгә килгәндә, был мөмкинлектән Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаттарын өҫтәмә һайлау уҙғарылған Новиковка һәм Металлургия бер мандатлы округтары һайлаусылары ғына файҙалана ала.

Бының өсөн ошондай бер мандатлы һайлау округында йәшәгән ер буйынса теркәлеү, шулай уҡ һанлы һайлау участкаһындағы һайлаусылар исемлегенә индереү тураһында ғариза бирә ала. Ғаризалар 29 июлдә үк ҡабул ителә башланы һәм 8 сентябрҙә тамамлана. Ғариза тапшырыу тәртибе менән Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы сайтында танышырға була.

– Коронавирус пандемияһына бәйле тауыш биргәндә ниндәй һаҡлыҡ саралары күрелер?

– Мәғлүм булыуынса, ил Конституцияһына төҙәтмәләр буйынса дөйөм Рәсәй тауыш биреүенә әҙерләнгәндә һәм уны үткәргәндә һайлау комиссиялары “Роспотребнадзор”ҙың Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы менән яраштырылған ҡәҙәттәренә таянып эш итте. Был ҡәҙәттәр көсөндә ҡала һәм һайлау комиссиялары тарафынан берҙәм тауыш биреү көнөнә әҙерләнгәндә һәм уны үткәргәндә тотола: тауыш биреүҙә ҡатнашыусыларҙың температураһы күҙәтелә, ҡулдары дезинфекциялана, санитар арауыҡты һаҡлау өсөн махсус һыҙыҡ-тамғалар һалына, йыһаз өҫтәре дезинфекциялау саралары менән эшкәртелә, бер тапҡыр ҡулланыла торған бирсәткәләр, комиссия ағзаларына экрандар таратыла һ.б. Һайлау комиссиялары етерлек күләмдә махсус, антисептик һәм дезинфекциялау саралары менән тәьмин ителә. Был йүнәлештәге эш урындағы үҙидара органдары менән тығыҙ хеҙмәттәшлектә тормошҡа ашырыла.

– Һайлаусыларҙа 13 сентябрҙә тауыш биреү тәртибе буйынса һорау тыуһа, ҡайҙа мөрәжәғәт итергә мөмкин?

– Башҡортостан Республикаһы Үҙәк һайлау комиссияһында 2020 йылдың 29 июленән һайлаусылар өсөн “ҡыҙыу элемтә” эшләй. Республика халҡының һорауҙарына Башҡортостан Республикаһы Үҙәк һайлау комиссияһының хәл иткес тауыш хоҡуғына эйә ағзалары һәм комиссия Аппараты хеҙмәткәрҙәре яуап бирә. “Ҡыҙыу элемтә” телефондары – (347) 280-95-06, (347) 280-96-34. Шулай уҡ 8-800-20000-20 номеры буйынса Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһының мәғлүмәт-белешмә үҙәгенә шылтыратырға мөмкин.

Әйткәндәй, киләһе һайлау кампанияһы тураһындағы бөтә мәғлүмәт Башҡортостан Республикаһы Үҙәк һайлау комиссияһы сайтындағы “Һайлау 2020” бүлегендә, йәһә комиссияның Facebook, “Бәйләнештә” һәм “Класташтар” социаль селтәрҙәрендәге сәхифәләрендә урынлаштырылған.

Ринат ҒӘФҮРОВ әңгәмәләште.

Закон хупланды

Быйыл Рәсәй Федераль Йыйылышы Дәүләт Думаһы өсөнсө уҡыуҙа “Рәсәй Федерацияһының айырым закондар актына үҙгәрештәр индереү тураһында” Закон ҡабул итте.
Уға ярашлы, хәҙер һайлауҙа, референдумда бер нисә көн рәттән тауыш биреүҙе үткәрергә мөмкин, тик ул өс көндән артмаҫҡа тейеш. Тауыш биреү ваҡыты тураһында ҡарарҙы һайлау йәки референдумды ойошторған һайлау комиссияһы ҡабул итә. Тауыш биреүҙе бер нисә көн рәттән уҙғарыу Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына төҙәтмәләр индереү буйынса дөйөм тауыш биреү сараһында ғәмәлдә һынап ҡаралды ла инде.

Ошо законды ҡабул итер алдынан Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Элла Памфилова Рәсәй Президенты менән осрашты. Эшлекле һөйләшеү барышында ул ил етәксеһенә Рәсәй Конституцияһына төҙәтмәләр индереү буйынса дөйөм тауыш биреү сараһынан һуң социологик хеҙмәттәр тикшереү үткәреүе, кешеләрҙән һорау алыуҙар ойоштороуы хаҡында белдерҙе.

“Баҡтиһәң, беҙ тәҡдим иткән тәртип халыҡҡа бик оҡшаған. Әле дөйөм торош бер аҙ яҡшырһа ла, төбәктәрҙә эпидемиологик хәл төрлөсә тора, шуға ла беҙ уны иҫәпкә алып фекерләйбеҙ. Әлбиттә, уны ете көн буйы түгел, был тормошҡа ашырылыҡ та түгел, әммә хәүефһеҙлекте тәьмин итеү өсөн ике-өс көн дауамында үткәреү мөмкинлеген ҡарарға көрәк”, – тигәйне шул саҡта рәйес. Уның тәҡдиме ғәмәлгә ашты – ошо хаҡта закон хупланды.

Элла Памфилова яңыраҡ уҙған Бөтә Рәсәй “Фекерҙәр биләмәһе” йәштәр белем биреү форумында “Сәйәсәт һәм селтәр лидерҙары” сменаһында ҡатнашыусылар менән осрашҡанда, яңы технологиялар, һайлау процесына һанлы технологияларҙы индереүгә бәйле хәүеф һәм саҡырыуҙар тураһында ла һөйләне. Шулай уҡ Үҙәк һайлау комиссияһының яңы технологияларҙы – протоколдарҙы QR-кодлау, “Мобиль һайлаусы” механизмын, һайлаусыға ҡулланырлыҡ һәм аңлайышлы һанлы сервисты, ситтән тороп тауыш биреүҙе өҙлөкһеҙ индереүҙе дауам итеү хаҡында ла һөйләне. Ошо осрашыуҙа ул 13 сентябрҙә дистанцияла тауыш биреүҙең тағы ла Курск һәм Ярославль өлкәләрендә дауам итәсәген белдерҙе.

“Бер яҡтан, дистанцияла электрон тауыш биреүгә һорау булһа, айырыуса йәштәрҙә, икенсе яҡтан, быны һанға һуҡмай ҡараған сәйәсмәндәр һәм эксперттар бар. Улар асыҡлыҡты һәм тауыш биреүҙең йәмәғәтселек күҙәтеүе нигеҙендә барыуын тәьмин итергә көрәкләген аңламай. Был һорауҙар әлегә асыҡ килеш ҡала, әммә беҙгә яңы технологияларҙы индереп, барлыҡ аңлашылмаусылыҡтарҙы хәл итеүгә төбәлгән бөтә ҡыҙыҡһынған партиялар, йәмәғәт ойошмалары, эксперттар менән тулы аралашыу алып барыу мөһим”, – тип белдерҙе Элла Памфилова.

Беҙҙе һайлау системаһында тағы ла бер технологик яңылыҡ көтә – һайлаусыларҙың ҡултамғаһын йыйыуҙың электрон формаһы. Уны закон сығарыусылар хуплаған.

“Мин традицион тауыш биреү ғәмәлдән сығарылыр тип уйламайым, сөнки ул аралашыуға бәйле дөйөм процесты күҙ уңында тота – кешене ышандыра белеү, уларҙың проблемаларын тойоу һәм аңлау. Иң камил технологиялар ҙа сәйәси процестағы кешене алып ташлай алмай. Киреһенсә, аҡыллы һәм киләсәкле сәйәсмәндәргә үҙҙәренең ҡеүәтен тулы кимәлдә тормошҡа ашырыуҙа көслө ярҙамсы ул”, – тине Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе.

Мәғлүм булыуынса, республикала ла һайлау системаһы йылдан-йыл камиллаша, яңы технологиялар индерелә. Мәҫәлән, инде бер нисә йыл рәттән төбәктә һайлау бюллетендәрен эшкәртеү комплекстары (КОИБ) уңышлы файҙаланыла. Быйыл Башҡортостанда 13 сентябрҙә уҙасаҡ Берҙәм тауыш биреү көнөндә КОИБ-тар ҡулланыласаҡ. Республиканың ҡайһы бер территориаль һайлау комиссиялары Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһына урындағы һайлауҙа тауыш биргәндә КОИБ-тарҙы ҡулланырға рөхсәт һорап мөрәжәғәт иткән. Республиканың Үҙәк һайлау комиссияһы, был мөрәжәғәттәрҙе ҡарағандан һуң, Берҙәм тауыш биреү көнөндә ете ҡала округындағы һәм 26 муниципаль райондағы һайлау участкаларында 125 КОИБ эшләәсәге тураһында ҡарар ҡабул итте.

Р. МУСИНА.

АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ

Мал-тыуар имен булһа...

Стәрлетамаҡ белгестәре ышанысты юғалтмаҫ

Стәрлетамаҡ районы күп йылдар имен төбәктәр исемлегенә инә: бруцеллез, туберкулез, себер түләмәһе һәм башҡа хәүеф тыуҙырыусы ауырыуҙарға ныҡлы кәртә ҡуйылған.

Әйтергә кәрәк, эпизоотологик хәлдең ыңғай тороуы тотош райондың инвестициялар йәлеп итеүсәнлеген тәьмин итә, халыҡтың социаль-иҡтисади тормошона ла ыңғай йоғонто яһай. Мәҫәлән, Өфөләге аҙыҡ-түлек йәрминкәләрендә күптәр Стәрлетамаҡ районынан килтерелгән ит һәм һөт ризыҡтарына өҫтөнлөк бирә. Ни өсөн тигәндә, баш ҡала һатып алыусыларының ышанысын күптән яулағандар.

Райондың ветеринария хеҙмәте алдына ҡуйылған бурыстар ҙа шунан ғибәрәт. Уларҙы үтәүҙә хеҙмәткәрҙәр билдәле ғалим Иван Павловтың “табип кешене дауалаһа, ветеринар тотош кешелек сәләмәтлеге һаҡында тора” тигән тәғлимәтен йүнәлеш итеп алған. Ветеринария станцияһы һуңғы йылдарҙа төрлө йорт хайуандарының йоғошло ауырыуҙарын иҫкәртеү буйынса бай тәжрибә туплаған. Республика пилот проектына инеп, малдарға махсус бирка тағыу, телефон ҡушымтаһы ярҙамында хужаһын тиҙ билдәләү мөмкинлеге эште бермә-бер еңелләштергән. Эре хужалыҡтар сит илдән тоҡомло мал һатып алһа, уларҙың һаулыҡ торошо ныҡлап контролгә алына, бер ай карантинда тотола.

Бында 76 белгес эшләй. Йәштәрҙе йәлеп итеү өсөн күп көс һалына, маҡсатлы йүнәлтмә менән Өфөлә, Санкт-Петербург ҡалаһында уҡытырға тырышалар. Улар практиканы тап ошо станцияла үтә һәм эшкә лә ҡайта.

Стәрлетамаҡ район-ара ветеринария станцияһының матди-техник базаһы яҡшы. Эре ауыл биләмәләрендә 11 ветеринария участкалары эшләй, уларҙың һәр ҡайһыһы йыһаздар һәм махсус ҡорамалдар менән тулыһынса тәьмин ителгән.

– Уңайлы шарттар, техник мөмкинлектәр тыуҙырғаны өсөн Хөкүмәтебеҙгә, республика Ветеринария идаралығына бурыслыбыҙ, – ти Стәрлетамаҡ район-ара ветеринария станцияһы начальнигы Иншар Ғәбәйҙуллин.

Республикала беренсе булып хайуандар өсөн “Зоодом” дәүләт ҡунаҡханаһы төҙөлдө.

– Дүрт аяҡлы дуҫтарыбыҙ өсөн бындай хеҙмәткә ихтыяж ҙур, сөнки күптәр туризм менән мауыға, сит илдәргә ял итергә юллана, улар ҡайҙа ҡалдырырға хәҙер баш ватмай, беҙгә килтерә, – ти етәксе.

Стәрлетамаҡ район-ара ветеринария станцияһы белгестәре.

Эйе, бөгөн станция коллективының хеҙмәтләндереү өлкәһе киң. Район биләмәләрендә 40 меңгә яҡын һыйыр малы, 8650 һарыҡ һәм кәзә, өс меңгә яҡын сусҡа, дүрт мең баш умарта иҫәпләнә. Быларға ҙур ауыл хужалығы предприятиеларынан Калинин исемендәге “Авангард”, “Рощинский” хужалыҡтарын, крәҫтиән (фермер) хужалыҡтарын да өҫтәргә кәрәк.

Ошондай ҙур тармаҡҡа тәжрибәле етәксе, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре Иншар Мәүлейәр улы Ғәбәйҙуллин етәкселек итә. Ул аграр университеттың ветеринария факультетын тамамлағас, тормошон тыуған районы менән бәйләй. Төрлө хеҙмәт баҫҡыстарын үтә. 2009 йылдан район-ара ветеринария станцияһына етәксе вазифаһына тәғәйенләнә. Стәрлетамаҡ районының почетлы гражданы. Стәрлетамаҡ районы ветеринар-зоотехник күрһәткестәр буйынса оҙаҡ йылдар дауамында имен төбәк һанала. Малдарҙа йоғошло сирҙәр таралмауы иҫкәртеү сараларының тәүәл һәм ваҡытында үткәрелеүенә, ветеринария белгестәренең күҙәтеүҙе юғары кимәлдә ойоштороуына бәйле. Етәксе был йәһәттән бай тәжрибәле белгестәр – урынбаҫары Елена Голованова, ветеринар клиника мөдире Владимир Кочетков, Ғәлим Яубаҫаровтың фиҙакәр тырышлығын билдәләне. Стәрлетамаҡ ветеринария белгестәре киләсәктә лә республика кимәлендә яуланған ышанысты юғалтмаҫ.

Гөлсирә СӘХИЕВА.